# Ғафури уҡыуҙары

''Мәжит Ғафурины уҡыйбыҙ'' исеме аҫтында III-сө төбәк-ара Ғафури уҡыуҙары көндәре уҙҙы.

Ошо уҡыуҙар рамкаһында Аҫҡар үҙәк балалар китапханаһы ''Онотмайбыҙ һине, Ғафури'', - тип аталған әҙәби кисә ойошторҙо.

Шулай уҡ, уҡыу залында ''Башҡорт әҙәбиәтенең классигы - М. Ғафури'', тип аталған китап күргәҙмәһе „Онотолмаҫ әҙип" исемле слайд-сәйәхәт һәм „Ҡара йөҙҙәр" әҫәренең видео-инсценировкаһы күрһәтелде. Был уҡыуҙарҙа Ҡырҙас урта мәктәбенән Йомағужина Л. В. етәкселегендә 11 уҡыусы, 1-се һанлы Аҫҡар урта мәктәбенән 7 "А", 8 "В", гимназиянан 7 "В" класы - йәмғеһе илленән ашыу бала ҡатнашты.

Саралар барышында уҡыусылар Ғафуриҙың шиғырҙарын уҡыны.

Бигерәк тә Ҡырҙас мәктәбе уҡыусыларының шиғырҙарҙы тасуири итеп яттан һөйләүе барыһына ла бик оҡшаны. Бынан тыш, балалар китапханасы А. Солтанова ярҙамында әҙиптең биографияһына, ижадына байҡау яһаны.



Яҙыусы тормошонан әлегә тиклем бик үк билдәле булмаған ваҡиғалар тураһында ла мәғлүмәт алды. Уҡыуҙарҙың маҡсаты һәм бурысы үҫеп килгән быуында М. Ғафури ижадына һөйөү, ҡыҙыҡһыныу уятыу, башҡорт әҙәбиәтен һөйөүселәрҙең һанын арттырыу, Рәсәй халыҡтары телдәренә һәм мәҙәниәтенә ихтирам тойғоһо тәрбиәләү ине.

Китапханала уҙғарылған саралар ошо маҡсаттарға өлгәшеүгә ҙур өлөш индерҙе тип һанайбыҙ. Киләсәктә лә йәш быуын халыҡ шағирын онотмаҫ, уның әҙәби мираҫын өйрәнер, уҡыр тип өмөтләнәбеҙ.